ТОРМОШ ҺУЛЫШЫ

## Ҡала автобустары ниндәй төҫтә булыр?

**Ошо көндәрҙә “Башавтотранс” автобустарының яңы дизайны һайланды.**

Тауыш биреүҙә 40 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Йәмғеһе туғыҙ вариант тәҡдим ителде. Дизайн Мәскәүҙең Генплан институты менән берлектә Башҡортостан флагы төҫтәрен иҫәпкә алып эшләнде.

Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә хәбәр итеүенсә, автобустар республика флагы төҫөндә буласаҡ. 2019 йыл аҙағына тиклем бөтә күсмә состав берҙәм стилдә биҙәлергә тейеш. Мәғлүмәттәргә ҡарағанда, әле төбәктә 1 550 берәмек транспорт пассажирҙар ташыу менән шөғөлләнә. Шуларҙың 310-ы – “Башавтотранс”тың юғары класлы автобустары, 2 050 автобус – шәхси ойошмаларҙыҡы.

## 26 ауыл урамы яҡтыртылды

**Башҡортостан ауылдарына яҡтыртҡыстар ҡуйыу эше тамамланып килә. Әле урамдарында бөтөнләй яҡтылыҡ булмаған 26 ауылда 1593 диодлы шәм ҡуйылған. Монтажлауҙы муниципалитеттар ойошторған, лампаларҙы иһә бюджеттан тыш сығанаҡтар иҫәбенә һатып алғандар. Тиҙҙән тағы ла 20 биләмәлә 632 яҡтыртҡыс ҡуйыласаҡ. Республика Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Михаил Киреев ошо турала хәбәр итте.**

Шулай уҡ төҙөк булмаған 8,5 мең яҡтыртҡыс йүнәтелгән. Мәктәп эргәһендәге биләмәләргә 500 метр радиуста 370 шәм ҡуйылған. Нефтекама, Күмертау ҡалаларында, Әлшәй, Ейәнсура, Бөрө райондарында мәктәпкә илткән юлдар тулыһынса яҡтыртылған. Был эште киләсәктә лә дауам итеү күҙаллана.

## Эштәренә баһа бирелде

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Федерацияһының һайлау системаһы 25 йыллығын билдәләнә. Мөһим дата айҡанлы, халыҡҡа буласаҡ һайлауҙар тураһында мәғлүмәт биреү һәм һайлаусыларҙың хоҡуҡи мәҙәниәтен күтәреү буйынса Саҡмағош үҙәк биләмәара китапханаһының бик ҙур эш алып барыуын билдәләге килә.**

Уйлап ҡараһаң, район китапханаларында һайлау кампанияларының проблемаларына һәм уңыштарына арналған күпме сара, осрашыуҙар үткәрелгән! Һайлаусыларҙың хоҡуҡи белемен арттырыу, эшмәкәрлеген ойоштороу буйынса үткәрелгән республика конкурстарында район китапханаһы I һәм II дәрәжәле дипломдарға лайыҡ булды. Юбилей алдынан донъя күргән “Башҡортостан Республикаһының Үҙәк һайлау комиссияһы вестнигы” журналында Саҡмағош китапханасыларының лекторлыҡ һәм агитаторлыҡ һәләттәренә лә ҙур баһа бирелде.

## Бүләккә –79 автомобиль!

**Республиканың район һәм ҡалаларындағы ветеринария станцияларына, дәүләт ветеринария хеҙмәткәрҙәренә 79 автомобиль тапшырылды.**

Республика дәүләт ветеринария хеҙмәте төбәктең ветеринар-санитар именлеген тәьмин итеүҙә ғәйәт ҙур өлөш индерә. Тап уларҙың тынғыһыҙ хеҙмәте һөҙөмтәһендә агросәнәғәт комплексының барлыҡ өлкәһе, малсылыҡ, ҡошсолоҡ тармағы, фермер һәм шәхси хужалыҡтар әҙмәәҙлекле үҫешә, аҙыҡ-түлек базаһы булдырыла.

## Хәйбуллала — ҡояш “бағаналары”

**Хәйбулла районының дүрт ауылында урамдарҙы яҡтыртыу өсөн автономлы “ҡояш” бағаналары ҡуйылды. Көндөҙ был панелдәр ҡояштан энергия туплай һәм, ҡараңғы төшкәс, яҡтырта.**



Фото район хакимиәтенән.

Яңы технологияларға нигеҙләнгән ҡояш “бағаналары” хәйбуллалар өсөн бигерәк тә әһәмиәтле, сөнки һуңғы йылдарҙа шәхси йорттар күпләп төҙөлә. Һөҙөмтәлә электр энергияһына ҡытлыҡ арта. Ул шулай уҡ экологик яҡтан таҙа булыуы менән дә отошло.

Яңы технологияларҙы сафҡа индереү “Ҡала мөхите” программаһы нигеҙендә тормошҡа ашырыла. Аҡъярҙың — алты, шулай уҡ Бүребай, Татырүҙәк һәм Маҡан ауылдарының берәр урамында ошондай панелдәр урынлаштырылған. Киләсәктә лә был йүнәлештәге эш дауам итәсәк.

## Европанан һыйырҙар килтерелде

**Ейәнсура районында малсылыҡ комплексы тергеҙелә. Яңы Себенле ауылы эргәһендәге фермаға Европанан голштин тоҡомло 500 баш һыйыр ҡайтарылды. Ырымбур өлкәһенән инвестор килеү менән хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Проект дүрт йылға иҫәпләнә һәм комплексҡа 757 миллион һум йүнәлтеүҙе күҙ уңында тота.**

Башҡортостан еренә һәүкәшкәйҙәр ҡурҡып ҡына аяҡ баҫа. Артта — алты мең саҡрым юл. Яңы Себенле фермаһы улар өсөн яңы төйәк буласаҡ. Тиҙҙән һыйырҙарҙы өр-яңы рационға күсереп, быҙаулауға әҙерләйәсәктәр. Ғинуарҙың икенсе яртыһында фермала артыу көтөлә.

Ергән МТС-ы бөлгөнлөккә төшкәс, ферма дүрт йыл самаһы буш торған. Аҙбарҙарҙа ҡайтанан тормош ҡайнауын күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел ине. Әммә Ырымбур өлкәһе компанияһының инвестиция һалыуы һәм республика Ауыл хужалығы министрлығы ярҙамы менән малсылыҡ комплексы ҡайтанан асылды. Киләсәктә һауын һыйырҙары 1400-ҙән ашып китәсәк.

**Лилиә ДӘҮЛӘТБӘКОВА, Динә АРЫҪЛАНОВА, Венер ИСХАҠОВ, Кәримә УСМАНОВА әҙерләне.**

БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

# Сирек быуатлыҡ тарихы бар

## Республиканың һайлау системаһы 25 йыллыҡ юбилейын билдәләнә

**1993 йылдың көҙөндә бөгөнгө Рәсәй дәүләтселеген формалаштырыу юлында ҡыйыу аҙымдар яһалды: бер нисә ай эсендә Федерация Советына һәм Дәүләт Думаһының тәүге саҡырылышына депутаттар һайлау ойошторолдо һәм үткәрелде, Төп Закон проекты һәм яңы Конституцияны ҡабул итеү буйынса бөтә халыҡтың тауыш биреүе ойошторолдо. Ошо процестар менән бер рәттән, илдең яңы һайлау системаһы формалаша барҙы. Быйыл ойошма сирек быуатлыҡ юбилейын билдәләнә. Тантаналы ваҡиғаға арналған саралар быйыл октябрҙә илдең баш ҡалаһы Мәскәүҙә, дәүләтебеҙҙең төрлө төбәктәрендә, шул иҫәптән беҙҙең республикала ла үтте. Ошо айҡанлы илдең һайлау системаһы торошо, уның урындағы үҙенсәлектәре, камиллашыу перспективалары хаҡындағы һорауҙар менән Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Арыҫлан улы ВӘЛИЕВКӘ мөрәжәғәт иттек.**



Фото Үҙәк һайлау комиссияһы сайтынан.

**– Хәйҙәр Арыҫлан улы, Рәсәй һайлау системаһы барлыҡҡа килгән көндө аныҡ билдәләп буламы?**

– Илебеҙҙең бөгөнгө һайлау системаһы, әлбиттә, бер көнлөк кенә ваҡиға түгел. Рәсәй Президентының 1993 йылдың сентябренән алып декабренә тиклем ҡул ҡуйған указдары дәүләтебеҙҙең яңы һайлау системаһына нигеҙ һалды. Процесс иһә ошо уҡ йылдың сентябрендә башланды, Рәсәй Президенты Борис Ельцин тәүге күп партиялы һайлауҙар алдынан Федерация Советына һәм Дәүләт Думаһының беренсе саҡырылышына депутаттар һайлау буйынса Үҙәк һайлау комиссияһын формалаштырҙы. Артабан ошо уҡ комиссияға Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы проектын ҡабул итеү буйынса бөтә халыҡтың тауыш биреүен ойоштороу бурысы йөкмәтелде. 1993 йылдағы һайлау кампаниялары тамамланғас һәм яңы Конституция ҡабул ителгәс, 1993 йылдың 20 декабрендә Рәсәй Президентының “Рәсәй Федерацияһында һайлау системаһын камиллаштырыу саралары тураһында” Указы менән үрҙә телгә алынған комиссия даими нигеҙҙә эшләүсе Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы тип үҙгәртелде.

**– Бөгөнгө һайлау системаһын нисек баһалар инегеҙ?**

– Илебеҙҙең һайлау системаһы тулыһынса демократия принциптарына нигеҙләнгән һәм үҙенең төп һыҙаттарында тотороҡло булып тора. Шул уҡ ваҡытта, йәнле организм булараҡ, ул даими камиллашыу кисерә. Һайлау системаһы сәйәси мәҙәниәттең үҫеүенә, заман технологияһы яңылыҡтарына, йәмғиәт ихтыяждарына һәм көтөүҙәренә, уның үҫеш кимәленә яраҡлашырға тейеш. Шул уҡ ваҡытта, быйыл 30 октябрҙә һайлауҙы ойоштороусылар менән булған осрашыуында Рәсәй Президенты Владимир Путин билдәләгәнсә, һайлау системаһындағы барлыҡ үҙгәрештәр асыҡлыҡ, ғәҙеллек, үтә күренмәлелек принциптарын, уның ситтән килгән тәьҫирҙәрҙән бойондороҡһоҙлоғон нығытырға тейеш. Бер кем дә граждандарҙың ирекле рәүештә үҙ ихтыярын белдереүенә кәртә ҡуя алмай, уларҙың һайлауҙа белдергән фекерен үҙгәртергә хоҡуғы юҡ.

Әйтергә кәрәк, демократик һайлауҙар үткәреү буйынса күп йыллыҡ традициялары булған ҡайһы бер дәүләттәр менән сағыштырғанда, бер ни тиклем “йәшерәк” булһа ла, Рәсәй һайлау системаһының үҙ ҡаҙаныштары бар. Мәҫәлән, сит ил эксперттары Рәсәйҙә һайлау барышында видеокүҙәтеүҙе киң ҡулланыуҙың уникаль тәжрибәһе тупланғанын күп тапҡыр билдәләне. Донъяла тиңе булмаған “Һайлау” дәүләт автоматлаштырылған системаһын булдырыу ҙа алға табан яһалған ҙур аҙымдарҙың береһе булды: был яңылыҡ теләһә ҡайһы кимәлдә уҙғарылған һайлау сараларын ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә уңышлы ҡулланыла.

**– Рәсәйҙең һайлау системаһында Башҡортостан ниндәй урын биләй?**

– Һайлаусылар (3 050 303 кеше) һәм участка һайлау комиссиялары (даими нигеҙҙә эшләгәндәре – 3391) һаны буйынса республика комиссияһы илдең тәүге ун төбәге иҫәбендә. Был иһә федераль һәм төбәк кимәлендәге референдумдар, төрлө кимәлдәге власть органдарын формалаштырыуҙа Башҡортостан Республикаһы һиҙелерлек роль уйнай тип билдәләргә мөмкинлек бирә. Юҡҡа ғына республика күп тапҡыр Рәсәй субъекттары һайлау комиссияларының эш тәжрибәһен берләштереү, уртаҡлашыу майҙансығы булараҡ һайланманы. Мәҫәлән, беҙҙең базала 1995 йылда Урал һәм Волга буйы төбәктәре комиссияларының рәйестәре һәм секретарҙары өсөн Рәсәй Дәүләт Думаһына икенсе саҡырылыш депутаттарын һайлауҙы ойоштороу буйынса махсус семинар уҙғарылды, 2014 йылда Волга буйы һәм Урал федераль округтарының һайлау комиссиялары рәйестәре өсөн семинар-кәңәшмә ойошторолдо. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһының был саралары илдең һайлау комиссияларының көндәлек эшен һөҙөмтәлерәк итеү йәһәтенән ҙур әһәмиәткә эйә булды. 2013 йылдың декабрендә иһә Башҡортостандың үҙәк һайлау комиссияһы башланғысы менән Рәсәй субъекттары һайлау комиссияларының төбәк-ара хеҙмәттәшлеге тураһындағы килешеүгә нигеҙ һалынды, уға илдең 12 төбәгенең һайлау комиссиялары рәйестәре ҡул ҡуйҙы.

> КОДЕКСТАҒЫ ТАҒЫ БЕР ЯҢЫЛЫҠ – КОИБ ҠУЛЛАНЫЛҒАНДА ҺАЙЛАУСЫЛАРҘЫҢ ТАУЫШЫН КОНТРОЛЬ ИҪӘПЛӘҮ ПРОЦЕСЫН ҮТКӘРМӘҮ. БЕҘ ҒӘМӘЛДӘ ҺЫНАНЫҠ: ЭЛЕКТРОН ҠУЛЛАНМА ҺАЙЛАУСЫЛАРҘЫҢ ТАУЫШЫН ИҪӘПЛӘҮҘЕ ТЕҮӘЛ БАШҠАРА.

**– Һеҙҙеңсә, ошо сирек быуат эсендә Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһының иң ҙур ҡаҙаныштары тип нимәләрҙе атарға мөмкин?**

– Беренсенән, ике тиҫтә йылдан ашыу осор – хаҡы булмаған һөнәри тәжрибә туплау осоро, шул иҫәптән хаталар һәм һынауҙар аша. Әлбиттә, ошо йылдар эсендә беҙ күп уңыштарға ла өлгәштек. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта федераль кимәлдә Рәсәйҙең һайлауҙар һәм референдумдар тураһындағы закондарын кодификациялау тураһындағы фекерҙәр йышыраҡ яңғырай башланы. Беҙҙең республикала был йүнәлештәге эш 1990 йылдарҙың икенсе яртыһында уҡ башланғайны. Хәтерегеҙҙә булһа, 1997 йылдың 1 сентябрендә Башҡортостан Республикаһының Һайлау тураһындағы кодексы ҡабул ителде. Артабан, йәмғиәттәге һәм һайлау тураһындағы ҡануниәттәге үҙгәрештәр иҫәпкә алынып, уның яңы редакцияһы ҡабул ителде.

Республиканың һайлау системаһы йыш ҡына заман технологияларын һәм техникаһын һынау полигоны булып хеҙмәт итте. Мәҫәлән, 2003 йылда Башҡортостан Республикаһы Президентын һәм Рәсәй Дәүләт Думаһына дүртенсе саҡырылыш депутаттарын һайлау ваҡытында һайлаусыларҙың тауыштарын иҫәпләү өсөн әле генә барлыҡҡа килгән электрон ҡоролмалар – һайлау бюллетендәрен эшкәртеү комплекстары (КОИБ) ҡулланылды. Анығыраҡ әйткәндә, ул ваҡытта баш ҡаланың Дим районы һайлау участкалары тап ошо ысул менән эшләне. Шуныһы ла мәғлүм: 2003 йылдан 2011 йылғаса КОИБ-тар Рәсәйҙең 34 субъектында ғына ҡулланылды.

**– Рәсәйҙәге һәм, атап әйткәндә, Башҡортостандағы һайлауҙар ни тиклем асыҡ тип иҫәпләйһегеҙ? Һайлау комиссияларына үҙ эшендә ниндәй ҡыйынлыҡтар менән осрашырға тура килә?**

– Республикалағы һайлауҙар ғәмәлдәге ҡануниәткә ярашлы үтә, уларҙың барыһы ла тормошҡа ашырылған. Һайлау комиссияларының эше һәр саҡ асыҡ, уларҙың теләһә ҡайһы ултырышында матбуғат саралары вәкилдәре ҡатнаша ала. Беҙ маҡсатлы рәүештә участкаларҙа КОИБ-тар һанын арттырабыҙ: был да һайлауҙар процесын асыҡ һәм ғәҙел үткәреүгә булышлыҡ итә.

Алға барыу процесы еңел була тигән уйҙан, ғөмүмән, йыраҡмын, бигерәк тә тотош дәүләттең һайлау системаһы формалашыуы һәм үҫеше хаҡында һүҙ барғанда. Был юлда төрлө ауырлыҡтар һәм ҡаршылыҡтар осрай, хаталар төҙәтергә лә тура килә. Билдәле булыуынса, һайлауҙар осоронда законлы булмаған агитациялау, тауыштарҙы һатып алыу, һайлау алды “бысраҡ”тарын таратыу, “административ ресурс” тигән төшөнсәне ҡулланыу факттары булғаны бар. Ошондай кире күренештәрҙе ҡабаттан булдырмау өсөн бихисап эш башҡарылды, һайлау ҡануниәте лә камиллаштырылды. Шулай итеп, хәҙер ҡануниәтте боҙғандарға яза ҡатыраҡ: енәйәт эшен асыуға тиклем. Һайлауҙа ҡатнашыусыларға талаптар көсәйтелде, кандидаттарҙың биографияһы ентекле тикшерелә, һайлауҙарҙың финанс асыҡлығы контролдә тотола.

Һайлау комиссияларының составына килгәндә, бөгөн ағзаларҙың һаны 30 меңгә яҡын. Улар араһында төрлө белемле, төрлө һөнәр эйәләре бар; йәштәре лә, милләттәре лә, донъяға ҡараштары ла, сәйәси өҫтөнлөктәре лә төрлө. Ошонан сығып, беҙ хаталарҙан һәм етешһеҙлектәрҙән азат түгел: ҡайһы саҡта законды боҙоу осраҡтары була. Әммә ышандыра алам: беҙҙең эшмәкәрлектә улар бер ваҡытта ла ҙур кимәлгә етмәне, тауыш биреү һөҙөмтәһенә йоғонто яһарлыҡ булманы. Һәр айырым осраҡ буйынса тикшереү ойошторолдо, ғәйеплеләр ҡануниәткә ярашлы яуаплылыҡҡа тартылды.

**– Һайлауҙарҙың ҡануни базаһы ни тиклем камил? Үҙгәрештәргә ихтыяж бармы?**

– Хәҙерге ҡануниәт һайлау процедураларын һайлау кампанияларының төрлө этаптарында аныҡ көйләй. Шул уҡ ваҡытта ҡағиҙәләрҙең даими үҙгәреүе һайлау процесында ҡатнашыусыларҙың – кандидаттарҙың, һайлау берекмәләре ағзаларының, шулай уҡ һайлау комиссияһы ағзаларының эшендә ҡайһы бер аңлашылмаусанлыҡтарға килтерә, был етди ҡаршылыҡҡа әүерелә. Ошо хаҡта октябрҙә Мәскәүҙә Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы тарафынан ойошторолған фәнни-ғәмәли конференцияла ла әйтелде. Рәсәй Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Элла Памфилова үҙ сығышында һайлау ҡануниәтен камиллаштырыуҙың ҡайһы бер юлдарын билдәләне, шул иҫәптән ҡануниәтте кодификациялауҙы, Рәсәй Федерацияһының Һайлау кодексын ҡабул итергә тәҡдим итте. Үҙ сиратында, был саралар һайлау процесын барлыҡ ҡатнашыусылар өсөн дә асығыраҡ итер ине.

> ЗАМАН ТЕХНОЛОГИЯЛАРЫ ТӘҮГЕ СИРАТТА ҺАЙЛАУ КОМИССИЯҺЫ АҒЗАЛАРЫНЫҢ ХАТАЛАРЫН КӘМЕТЕҮГӘ БУЛЫШЛЫҠ ИТӘ, “КЕШЕ ФАКТОРЫ”НЫҢ ҺАЙЛАУ ҺӨҘӨМТӘҺЕНӘ ТӘЬҪИРЕН АҘАЙТА.

**– Күптән түгел БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаттары республиканың һайлау тураһындағы кодексына үҙгәрештәр индерҙе. Уның ҡайһы урындарына һайлаусыларҙың айырым иғтибарын йәлеп итергә теләр инегеҙ?**

– Был ихтыяж “Һайлау хоҡуҡтарына һәм Рәсәй Федерацияһы граждандарының референдумда ҡатнашыу хоҡуғына төп гарантиялар тураһында” Федераль законына үҙгәрештәр индереүгә бәйле тыуҙы, Кодекстың ҡайһы бер пункттарын актуалләштереү талап ителде. Шулай итеп, республиканың Һайлау тураһындағы кодексына түбәндәге норма индерелде: уға ярашлы, РФ һәм БР Йәмәғәт палаталары Башҡортостандың дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдарына һайлауҙар уҙғарғанда күҙәтеүселәр билдәләү хоҡуғына эйә. Кодекстағы тағы бер яңылыҡ – КОИБ ҡулланылғанда һайлаусыларҙың тауышын контроль иҫәпләү процесын үткәрмәү. Беҙ ғәмәлдә һынаныҡ: электрон ҡулланма һайлаусыларҙың тауышын иҫәпләүҙе теүәл башҡара. Ҡабаттан ҡулдан иҫәпләү иһә, киреһенсә, “кеше факторы” ҡатнашҡан яңылышлыҡтар тыуҙырыуы ихтимал. Шул уҡ ваҡытта бюллетендәрҙе ҡабаттан иҫәпләү мөмкинлеге һайлау процесында ҡатнашыусыларҙан нигеҙле ялыу килгән осраҡта һаҡланып ҡала.

**– Заман технологиялары һайлауҙар процесына ниндәй йоғонто яһаны? Киләсәктә интернет аша һайлау мөмкинлеге хасил булмаҫмы?**

– Заман технологиялары тәүге сиратта һайлау комиссияһы ағзаларының хаталарын кәметеүгә булышлыҡ итә, “кеше факторы”ның һайлау һөҙөмтәһенә тәьҫирен аҙайта. Әлбиттә, бындай хәл кешеләрҙең арыуынан, шул уҡ ваҡытта һайлау процесына маҡсатлы рәүештә тәьҫир итергә маташыуынан да килеп сығыуы ихтимал. Техника иһә был ғәмәлдәрҙе юҡҡа сығара. Икенсе яҡтан, яңы технологиялар һайлау процесының тиҙлеген дә арттыра, һайлау комиссияһы ағзаларының эшен еңеләйтә.

Интернет аша һайлау мөмкинлегенә килгәндә, дәүләтебеҙҙең һайлау системаһына 25 йыл тулыу айҡанлы Мәскәүҙә үткән фәнни-ғәмәли конференцияла заман технологиялары хаҡында ла күп әйтелде. Кәрәҙле телефон, Дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙең берҙәм порталы, биометрик мәғлүмәттәр ярҙамында һайлау мөмкинлектәре хаҡында тәҡдимдәр индерелде. Әлбиттә, бындай яңылыҡтар менән иң тәүҙә айырым категорияға ҡараған граждандар файҙаланасаҡ. Мәҫәлән, Алыҫ Төньяҡта йәшәүселәр һәм эшләүселәр. Илебеҙҙә иһә бындай үҙгәрештәр әле генә индерелмәйәсәк, күнегелгән һайлау саралары ҡулланыласаҡ.

**– Йомғаҡлау урынына һайлау системаһының яҡын перспективалары хаҡында ишетергә ине.**

– Рәсәйҙең һайлау системаһы заманға ярашлы ҡануниәткә нигеҙләнеп эшләй, уның ойоштороу һәм технологик тәьминәте донъяның алдынғы өлгөләренә тап килә. Һайлау системаһы, тормош кеүек, бер урында тормай, тармаҡты артабан да камиллаштырыу, унификациялау ихтыяжы бар. Шулай уҡ һайлау системаһын, заман талаптарына ярашлы, техник һәм кадрҙар йәһәтенән тәртипкә килтереү; төрлө категориялы граждандар ихтыярын белдергәндә ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөү, депутатлыҡҡа кандидаттарҙы күрһәтеү һәм теркәү процесын ябайлаштырыу кеүек проблемалар көнүҙәк. Әлбиттә, һайлау системаһының төп бурысы булып ҡануниәткә тулыһынса ярашлы һайлауҙар үткәреү ҡала. Ғөмүмән, илебеҙҙең һәм республиканың һайлау системаһы замандың барлыҡ үҙгәрештәре менән бергә атлай; һәр ваҡыт асыҡлыҡ, ғәҙеллек, легитимлыҡ принциптарына таянып, төрлө кимәлдәге һайлауҙарҙы үткәрергә әҙер.

**Рәшит ҒӘФҮРОВ әңгәмәләште.**

УРЫНДАҒЫ БАШЛАНҒЫСТАР

# Трактор өсөн тауыш бирҙек

**Республикала дүртенсе йыл “Урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы” уңышлы хәл ителә. Сәйетбаба биләмәһенә ҡараған ауылдар халҡы, урындағы депутаттар, ойошма етәкселәре, хеҙмәткәрҙәре, эшҡыуарҙар ҡатнашлығында уҙған дөйөм йыйылышта ла ошо хаҡта һүҙ барҙы.**

Ауыл биләмәһе башлығы Айрат Сәйфуллин, йыйылышты асып, көн тәртибе һәм был мөһим программа менән ҡыҫҡаса таныштырҙы, күптән түгел трактор һәм уға ҡорамалдар алып, әлеге көндә техникаларының изгелеген күргән Имәндәш, Красноусол ауыл биләмәләрен атап үтте.

– Беҙгә лә ошо уңайлы мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырмаҫҡа кәрәк. Тик бының өсөн бөтәбеҙҙең дә ошо программала әүҙем ҡатнашыуы шарт. Проект биләмәлә айырыуса өҫтөнлөклө проблеманы хәл итеүгә йүнәлтелергә тейеш, – тип үҙенең фекерен әйтте биләмә башлығы.

Шуларҙы иҫәпкә алып, Сәйетбаба ауыл биләмәһе халҡы иң тәүҙә яңы трактор алыу мәсьәләһен мөһим тип тапты. “Сәйетбаба башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге” баш белгесе Рәзим Мәүлитҡолов сығыш яһап, был программаны ҡабул итеү заман талабы, Хөкүмәт ярҙам ҡулы һуҙа икән, беҙ ҙә үҙ сиратыбыҙҙа уға ыңғай яуап бирергә тейешбеҙ, тип трактор алырға тигән тәҡдимде хупланы. Залда йыйылған халыҡ та үҙ тауышын белдереп, уның фекерен йөпләне.

Йыйылышта балалар ҙа ҡатнашты. Сәбәбе – улар тигеҙ, матур юлдан рәхәтләнеп мәктәпкә барғылары килә, әгәр юл таҙартылһа, еңелгә төшәсәк. Ошо уйҙарын уҡыусылар һүрәттәрендә лә сағылдырған. Тап шуға улар ҙа ололар менән бер рәттән ихлас тауыш бирҙе.

Шулай итеп, киләһе йылдағы “Урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы”нда ҡатнашып, Сәйетбаба ауыл биләмәһе өсөн 1 миллион 450 мең һумлыҡ “МТЗ-82” тракторы һатып алырға ҡарар ителде. Республика бюджетынан бер миллион һумлыҡ грант бүленәсәк. Ҡалған сумманы – 150 мең һумды урындағы бюджеттан, 150 мең һумын – бағыусыларҙан һәм 150 мең һумын халыҡтан йыйырға ҡарар ителде. Тракторҙан аҡса артып ҡалған осраҡта, уға өҫтәлмә ҡорамалдар йәки запчастар һатып алыу тәҡдиме лә халыҡтың күпселегендә яҡлау тапты.

“Урындағы башланғыстарҙы яҡлау программаһы”ның эшен йәнләндереү һәм алып барыу өсөн инициативалы төркөм төҙөлдө.

**Рәүилә ЛОҠМАНОВА.**

Ғафури районы.